Фекерләү һәләтен үҫтереү өсөн текст

## Муйыл ағасы.

Йылға буйында,тирә-яҡҡа йәм биреп,муйыл ағасы үҫте.Яҙ килеү менән,шаулатып япраҡ ярҙы.Ҡояштың ҡайнарлығына, донъяның яҡтылығына,һауаның сафлығына шатланды. Күпертеп сәскә атып ебәрҙе.

Муйылдың ошондай матур сағын Сәлимә менән Миләүшә күреп ҡалдылар.

Бер аҙҙан ҡосаҡтары муйыл сәскәһе менән тулған был ҡыҙҙар,көлөшә-көлөшә,йылға буйынан ҡайтып киләләр ине.Бик тә рәнйене муйыл ағасы,тәртипһеҙ ҡыҙҙарҙы күреп:

-Кеше күҙенә күренер еремде лә ҡалдырманылар бит,-тип иланы ул.

Көндәр үтте.Ул,илауынан туҡтап,ҡалған сәскәләрен ҡойҙо.

Һутлы емештәре менән һыйларға уйланы муйыл килгән ҡунаҡтарҙы.Бер саҡ ҡап-ҡара булып емештәр өлгөрҙө.

Ошо ваҡытта теге ҡыҙҙар тағы килеп еттеләр.Улар иң емешле ботаҡтарҙы һындырып-һындырып алдылар ҙа ҡайтып киттеләр.

Тағы ла яҙ килде.Муйыл ағасы япраҡ та ярманы,сәскә лә атманы.

Муйыл йыйыр ваҡыт еткәс,теге ҡыҙҙар килеп етте.Килделәр ҙә аптырап ҡалдылар.

Ҡыҙҙарҙың күҙҙәрен йәш ҡапланы.Оялыуҙан һәм йәлләүҙән ни эшләргә лә белмәне улар.Тик унан ни файҙа?(Г.Юнысова)

Муйыл ағасы.

1. Муйыл ағасы ҡайҙа үҫкән?
2. Яҙ килгәс,ул ни эшләгән?
3. Муйылдың шундай матур сағын кемдәр күргәндәр?
4. Улар нимә эшләгәндәр?
5. Көндәр үткәс, муйыл ағасы менән ни булған?

6. Ҡунаҡтарҙы муйыл нимә менән һыйлаған?
7. Ҡыҙҙар был юлы нимә эшләйҙәр?
8. Яҙ булғас, муйыл менән ниндәй хәл була?
9. Ҡыҙҙарҙың күҙен ни өсөн йәш ҡаплай?